*Әхиәр ИСХАКОВ,*
*«Атайсал» клубы ағзаһы*



*Мәғариф ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы, тарихсы, крайҙы өйрәнеүсе Рамаҙан Исмәғил улы Үтәғоловҡа 70 йәш.*

# ТЫНҒЫҺЫҘ ВЕТЕРАН

1930 йылдың 15 ноябрендә Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында тыуа Рамаҙан Үтәғолов. 1934 йылда Үтәғоловтар ғаиләһе Баймаҡҡа күсеп килә. Рамаҙан Исмәғил улы, Магнитогорск педагогия институтының тарих факультетын тамамлағандан һуң, 1953 йылда 2-се һанлы Баймаҡ урта мәктәбендә тарих уҡытыусыһы булып эшләй, 1955 йылда уны 1-се һанлы урта мәктәпкә уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса мәктәп директоры урынбасары итеп тәғәйенләйҙәр. Уҡыу-уҡытыу эшен тейешле кимәлгә күтәргәне һәм яҡшы методист булғаны өсөн, уны Баймаҡ район халыҡ мәғарифы бүлегенә инспектор итеп үрләтәләр.

1960-67 йылдарҙа Үтәғолов эреләтелгән өс районды Баймаҡ зона халыҡ мәғарифы бүлеген етәкләй. Ошо йылдарҙа район мәктәптәренең матди-техник базаһы нығып, уҡыу-уҡытыу һәм тәрбиә биреү өлкәһендә һиҙелерлек уңыштарға ирешелә. 50-60-сы йылдарҙа район мәктәп һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары төҙөү буйынса инициатор булып сыға һәм 1965 йылға уларҙың 60 проценттан ашыуы яңыртыла. Республикала беренселәрҙән булып, райондың бөтә башланғыс синыф уҡыусылары бер сменалы уҡыуға күсә, урта мәктәпте тамамлаусыларҙың 35 проценты юғары уҡыу йорттарына инә.

Рамаҙан Исмәғил улы 1963 йылда Мәскәүҙә Бөтә Союз педагогик уҡыуҙарҙа сығыш яһап, балаларҙың икенсе йылға класында ҡалдырылмауы буйынса райондың эш тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Ошо уҡ ваҡытта район урындағы кадрҙарҙы әҙерләүгә ҙур иғтибар бирә: юғары уҡыу йорттарына инеүселәргә ҡалала әҙерлек курстары ойоштороала һәм ҡабул итеү һынауҙары үтә, ситтән тороп уҡыған уҡытыусылар өсөн юғары уҡыу йорттарының уҡыу-консультация һәм имтихан ҡабул итеү бүлеге асыла.

Яңы мәктәптәр төҙөү буйынса халыҡ мәғарифы бүлеге республикала еңеүсе була һәм ике тапҡыр Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ менән бүләкләнә.

Рамаҙан Исмәғил улы Үтәғоловтың хеҙмәте лайыҡлы баһалана: 1965 йылда уға «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы», Рәсәй Фәндәр академияһының «Педагогия фәне өлкәһендәге новаторлығы өсөн» Почет грамотаһы бирелә, 1966 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

1967 йылдан алып хаҡлы ялға киткәнгә тиклем Рамаҙан Исмәғил улы Сибай ҡалаһында эшләй: Сибай ҡала комитетының сәйәси-мәғариф кабинеты мөдире, 1970 йылдан интернат-мәктәптең, ә аҙаҡ — ярҙамсы мәктәп директоры. 1973 йылда уға «Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы» исеме бирелә.

Рамаҙан Исмәғил улы, 1989 йылдан Башҡортостан крайҙы өйрәнеүселәр йәмғиәтенең ағзаһы булараҡ, бик күп эштәр башҡарҙы. «Ватандаш» журналы, «Атайсал», «Йәшлек», «Башҡортостан» газета-журналдарында тыуған яҡтың тарихын һәм крайҙы өйрәнеү, пропагандалау буйынса мәҡәләләре донъя күрҙе. Ул тарихи материалдарҙы ентекле өйрәнеп, ваҡиғалар барған урындарҙа булып, мәғлүмәттәр туплап, шәхестәрҙең тормош юлын, фажиғәле яҙмыштарын өйрәнеп, репрессия ҡорбандарына асылған енәйәт эштәрен тикшереп, һығымталар яһай. Тарихи темаларға арналған хәтер кисәләренең, китапханаларҙа, мәктәптәрҙә һәм клубтарҙа үткәрелгән осрашыуҙарҙың ойоштороусыһы ла Рамаҙан Исмәғил улы. Уның йырсы, ҡурайсы һәм сәсән Буранбайҙың 175 йыллығына Буранбай ауылында, ике Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Ш.Ғафаровтың 100 йыллығына Ҡолсора ауылында, атаҡлы мәғарифәтсе, мәшһүр дин әһеле Хәлил хәҙрәт Рәхимовтың 135 йыллығына Таулыҡай ауылында, публицист Мөхтәр Байымовтың 100 йыллығына Байым ауылында, Ш.Мәтинов ахунды иҫкә алыу кисәһендә (Атанғол ауылында) сығыштары, «Михнәтле йылдар ауазы», «Ғазаплы юлдарҙа», «Һаҡмар өҫтөндәге ҡара ҡырау» һ.б. мәҡәләләре йәш быуынды тәрбиәләүҙә бик ҙур әһәмиәткә эйә.

1998 йылдың декабрь айында Баймаҡ ҡала советының ҡарары менән Рамаҙан Исмәғил улы Баймаҡ һәм баймаҡтар тураһындағы очерктары өсөн райондың Батыр Вәлид исемендәге премияһы лауреаты булды.

Сибай ҡалаһы, Баймаҡ районы һәм республиканың йәмғиәт тормошонда ул актив ҡатнаша: Бөрйән ырыуының шура, Сибай башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы, Баймаҡ район үҙәк китапханаһы янындағы «Атайсал» клубы ағзаһы. Яр Саллы ҡалаһында үткән Татарстан Республикаһының суверенитеты көндәрендә ҡатнаша (1993 й.), Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты була (1995 й.).

Уның 2000 йылда «Белем һуҡмаҡтарынан» исемле китабы донья күрҙе. Унда Баймаҡ районы мәғрифәте тарихы сағылдырыла: беренсе мәктәп-мәҙрәсәләрҙән алып, район халыҡ мәғарифының хәҙерге хәл-торошона тиклем үткән юлы һүрәтләнә.

Беҙ, Баймаҡ район үҙәк китапханаһы янындағы «Атайсал» клубы ағзалары, уны оло емешле юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ, ныҡлы сәләмәтлек, ижади уңыштар, бәхетле тормош теләйбеҙ.